*Ҡамса МОРТАЗИН,*
*филология фәндәре кандидаты*

# Рус түгелмен...

Һуңғы йылдарҙа Силәбелә байтаҡ әҙәби йыйынтыҡтар донъя күрҙе. Улар араһында ”От Урала до Невы” (2001 йыл), ”Знакомство” (2002 йыл) исемле поэзия һәм проза йыйынтыҡтары бар. Төбәк әҙәбиәте йылъяҙмаһын кәүҙәләндергән ”Область вдохновения” исемле ике томлы (I том — проза, II том — поэзия, 2003 йыл) йыйынтыҡ йәмәғәтселек тарафынан өлкәнең 70 йыллыҡ юбилейы айҡанлы башҡарылған иң күренекле хеҙмәттәрҙең береһе тип баһаланды. Шулай уҡ 5—9 һәм 10—11синыфтар өсөн әҙерләнгән ”Литература России. Южный Урал” (2003 йыл) тигән хрестоматия Көньяҡ Урал яҙыусылары ижадын айырым өйрәнә башлауы менән мәғариф өлкәһендә яңылыҡ булды.

Урыҫ телендәге ошо йыйынтыҡтарҙа байтаҡ башҡорт һәм татар авторҙары бар. Улар араһында Михаил Львов (Рифҡәт Ғәбитов), Камил Мостафин, Айвен Сиразетдинов, Рөстәм Вәлиев, Басир Рафиҡов, Рамаҙан Шәғәлиев, Ирек Сабиров, Алевтина Вәлиева, Урал Ҡолошов кеүек исемдәрҙе осратабыҙ. Шулай уҡ был исемлеккә айырым китаптар авторҙары Аттила Садиҡов, Владимир-Рамазан Вафинды өҫтәргә була. Был яҙыусыларҙы туған телдә һәм урыҫ телендә ижад итеүсе әҙиптәр тип ҡарарға мөмкин. Халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында ҡайғыртҡанда беҙ сит мөхиттә әҙип булып формалашҡан милләттәштәребеҙҙең яҙмышына битараф була алмайбыҙ. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарған сәйәсәт милләттәштәребеҙҙе бергә туплау булһа, башҡа төбәктәге урыҫ телле башҡорт авторҙарының рухи мираҫын өйрәнеү — маҡсатҡа ярашлы эштәрҙең береһе ул. Был хаҡта ”Йәшлек” (24 февраль, 2005 йыл) гәзитендә Өфөлә уҙғарылған Йәш яҙыусылар конференцияһы алдынан Башҡортостан яҙыусылар союзының идара рәйесе урынбаҫары Азамат Юлдашбаев: ”Шул уҡ Талха Ғиниәтуллин да, Башҡортостандан сит мөхиттә әҙип булып формалашып, әле Мәскәүҙә йәшәһә лә, барыбер шул башҡорт әҙәбиәте тирмәненә һыу ҡоя”, — тип урынлы һәм дөрөҫ билдәләп үтте.

Шуға күрә әлеге ваҡытта беҙҙе Силәбе өлкәһе һәм ҡалаһында йәшәп, рухи мираҫ ҡалдырған һәм хәҙер ҙә әҙәби ижад менән әүҙем шөғөлләнеүсе яҡташтарыбыҙ ҡыҙыҡһындыра. Уларҙың һәр ҡайһыһының әҙәбиәттә үҙ урыны бар. Мәҫәлән, Рөстәм Вәлиевты әҙәби тәнҡит хаҡлы рәүештә проза оҫтаһы тип таныны. Владимир-Рамазан Вафиндың ”Чужаки” исемле китабы 1995 йылда Рәсәй Эске эштәр министрлығының ”Иң яҡшы китабы” тип табылып, махсус премияға лайыҡ булды. Ошо яҙыусылар исемлеген башлап ебәреүсе оло быуын әҙиптәренең береһе — Михаил Львов (1917—1988). Уның ысын исем-фамилияһы Рифҡәт Дәүләт

улы Ғәбитов, Башҡортостандың Салауат районы Нәсибаш ауылында тыуып үҫкән, тәүҙә Силәбелә йәшәй, аҙаҡтан Мәскәүгә күсеп китә. Утыҙынсы йылдарҙа әҙәбиәткә килеп, ҡәләме яу яландарында шымарған ялҡынлы һәм үткер телле шағир. 1944 йылда "Чтобы стать мужчиной, мало им родиться" исемле шиғыры, хәрби гәзиттә баҫылып сыҡҡандан һуң, уға танылыу килтерә:

Чтобы стать мужчиной, мало им родиться,
Чтобы стать железом, мало быть рудой.
Ты должен переплавиться, разбиться
И, как руда, пожертвовать собой...

Михаил Львовтың "Сколько нас, нерусских, у России..." исемле шиғыры идея-йөкмәткеһе менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Россиянмын" шиғырына яҡын. Шулай ҙа шағирҙың лирик поэзияһында үҙәк йүнәлеште тыуған ил темаһы биләй. "Минең Уралым", "Златоуст", "Урал шағирына" һәм башҡа шиғырҙары быға асыҡ миҫал. Шағир шуға ла "Урал һүҙе" исемле шиғырында Уралды Ватандың да, үҙенең дә үҙәге, тип юҡҡа ғына атамаған. Был шуны күрһәтә: Урал шағирҙары тип дөйөмләштерелгән урыҫ телле башҡорт һәм татар авторҙары ижадында урын колориты көслө сағылыш тапҡан. Яҙыусылар урыҫ телендә ижад итһәләр ҙә, тыуған ерҙән, милли ерлектән бөтөнләйгә айырылмағандар.

Ошо күҙлектән ҡарағанда, Урал Ҡолошов ижады ла фекеремде ҡеүәтләр. Урыҫ телле авторҙар исемлеген Михаил Львов башлап ебәрһә, Урал Ҡолошов сағыштырмаса йәш әҙиптәрҙең береһе. Уның исеме силәбеләр өсөн яңылыҡ түгел, сөнки яҡташтары әҙипте рәссам, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре тип тә беләләр. Киң ҡарашлы, ижади һәләтле шәхес айырыуса һуңғы арала оҫта прозаик булараҡ таныла бара. Ваҡытлы матбуғатта йәш яҙыусы менән таныштырыуы рәүешендә мәҡәләләр баҫылһа ла, уның ижады әҙәби тәнҡит күҙлегенән баһаланмаған.

Урал Фәләх улы Ҡолошов 1965 йылда Силәбе өлкәһенең Сосновка районы Тәгеш ауылында тыуған. Ул атаҡлы башҡорт шағиры Ғәлимов Сәләмдең яҡын туғаны. Үҙенең тыуған ауылында белем ала. Унан хәрби хеҙмәттә була. Силәбе мәҙәниәт институтын тамамлағандан һуң Сосновка районы Долгодеревенское ҡасабаһының сәнғәт мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Районда "У камина" әҙәби түңәрәге етәксеһе, Силәбелә "Аҡмулла" әҙәби берекмәһе ағзаһы була. Уның әҙәби ижад менән мауығыуы студент йылдарына тура килә. Тәүге шиғырҙары институттың "Кадры культуры" гәзитендә баҫыла. Һуңғы йылдарҙа уның уй-кисерештәре тәрәнәйҙе, мөхәббәт лирикаһынан фәлсәфәүи әҫәрҙәр ижад итеүгә күсте. 2000 йылда "Ағиҙел" журналына уймаҡ хикәйәләрен тапшырғас, күренекле әҙип Рәшит Солтангәрәев уны икеләнмәйенсә өлгөргән прозаик, тип танығайны. Ошондай баһа ҡәләменә ҡеүәт биргәндер, Урал Ҡолошов шунан һуң шиғри парсалар ҙа яҙҙы. Ана шулай әҫәрҙәре "Ағиҙел", "Башҡортостан", "Южный Урал" кеүек баҫмаларҙа донъя күрҙе.

Ике һәм дүрт юллыҡ шиғри парсаларында шағир образлылыҡҡа, тос фекергә ынтыла. Уларҙа ялғанлау һәм яһалмалылыҡ юҡ. Автор

һүҙ уйнатыу менән мауыҡмай, киреһенсә, йөкмәткегә ярашлы поэтик формалар таба. Мәҫәлән:

> Ҡояш — ул һүҙ генә түгел, ут,
> Уйҙарыңды таҙа тот! —

тип киҫәтә;

> Иң тәүҙә Кеше бул,
> Аҙаҡтан донъя бүл, —

тип саҡыра;

> Берәү ерҙә өйөрөлә,
> Юҡ-бар эште эш итеп,
> Берәү ерҙе әйләндерә
> Кешене Кеше итеп, —

тип үҙенсә һығымта яһай.

Урал Ҡолошов тәбиғәте менән тыйнаҡ, сабыр һәм һиҙгер күңелле кеше. Уның үҙенсәлекле хикмәттәр оҫтаһы булып танылa барыуы тормошто үтә күреүсән булыуы менән бәйлелер. Ул төрлө образдарҙы оҫта тотоп ала, шуларҙы ысын рәссамдарса күрһәтә белә.

Урал һөнәре буйынса рәссам. Силәбеләге Шәйехзада Бабич исемендәге милли китапхананың юғары эстетик зауыҡ менән биҙәлеше уның хеҙмәт емеше һәм сәнғәтенең сағылышы. Рәссамлыҡ һәләте уның әҙәби ижадына ла йоғонто яһағандыр, тип уйларға нигеҙ бар. Бер ваҡыт әҙәбиәт, ижад хаҡында әңгәмәләшеп ултырғанда Урал Фәләх улы үҙе хаҡында былай һөйләне: "Дөрөҫөн әйткәндә, мин һынлы сәнғәттән әҙәби ижадҡа күсә барҙым. Сөнки уй-кисерештәремде буяу төҫтәре аша ғына әйтеп бирә алмам кеүек тойолдо. Бөгөн мине лә, башҡа әҙиптәр кеүек, замандың көнүҙәк проблемалары борсой, мәңгелек хаҡында уйланам. Әҙәби ижадты бының өсөн киң майҙан тип һанайым".

Йәш яҙыусының тынғыһыҙ эҙләнеүҙәре үҙенекен итә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә әҫәрҙәре "У камина" (Силәбе, 2001), "От Урала до Невы" (Силәбе, 2001), "Знакомство" (Силәбе, 2002), "Силәбе шишмәләре" (Силәбе, 2002), "Һөйөнсө" (Силәбе, 2003), "Берез Уральских шум" (2004) йыйынтыҡтарында донъя күрҙе һәм уҡыусы тарафынан йылы ҡабул ителде. "Рәхмәттең көсө" исемле китабы әҙерләнеп, "Китап" нәшриәтенә тапшырылған.

Урал Ҡолошов әҙәбиәттә танһыҡ жанр — хикмәт жанрына мөрәжәғәт итә. Хикмәт — ғәрәп һүҙе, аҡыл, фәлсәфә тигәнде аңлата, ул көнсығыш әҙәбиәтенең традицион жанры. Хикмәт тип тапҡыр мәғәнәле һәм өгөт-нәсихәтле, философик йөкмәткеле ҡыҫҡа сәсмә һәм теҙмә әҫәрҙәрҙе әйтәләр. Көнсығыш әҙәбиәтенән Ғазали, Руми, Джами кеүек хикмәтселәрҙе күрһәтергә мөмкин. Шулар араһында шиғри хикмәттәре менән бөтә донъяға танылыу тапҡан Омар Хәйям булыр. Боронғо төрки поэзияһында Әхмәт Йәсәүи, Сөләймән Баҡырғани хикмәттәре башҡорттар һәм татарҙар араһында киң таралған. Мәүлә Ҡолой хикмәт жанры оҫтаһы. "XX быуат башҡорт поэзияһында Фәйзи Ғүмәров хикмәт жанрына гражданлыҡ хоҡуғы бирҙе, үҙ шиғриәтенең аҫыл ташы итте", — тип билдәләне Ғ.Хөсәйенов.

Урал Ҡолошовтың "Рәхмәттең көсө", "Хоҙай ҡөҙрәте", "Күңел йылыһы эҙләп...", "Ҡуян бәхете", "Бәхет хаҡында хикмәт", "Ҙур ҡойроҡ

хаҡында хикмәт", "Тырыш һәм Ҡалтаймыш" һәм башҡа хикмәттәре фәһемле әҫәрҙәр. Уларҙың геройҙары ла төрлө: ҡоштар, хайуандар, тәбиғәт күренештәре. Күңел йылыһы эҙләп осҡан ҡошсоҡтар, бәхет эҙләп сапҡан аттар, һәр кемгә ғашиҡ ҡуяндар һәм башҡалар — быларҙың барыһы ла үҙҙәренә генә хас холоҡло булыуҙары менән айырылалар.

"Күңел йылыһы эҙләп..." тигән әҫәрендә төньяҡтан һәм көньяҡтан осоп килгән ике ҡошсоҡ осраша. Улар икеһе лә ял итергә тип, бер үк ағастың бер үк ботағына ҡунған була. Тәүгеһе былай тип һорай:

— Йә, унда, көньяҡта, тормош нисек? Йылымы? Әллә беҙҙең яҡтағы кеүек һыуыҡмы? Ем бармы? Күрше-күлән һәйбәтме?..

Икенсе ҡошсоҡ һорауға ошолай яуаплай:

— Юҡ инде, дуҫ... Әгәр ҙә һин мине йәлләгәнһең икән, тимәк, һинең йөрәгең мәрхәмәтле, күңелең дә саф, изгелекле. Бына шундай күңел йылыһы эҙләйем дә инде мин...

Ике ҡошсоҡ образы кешелек йәмғиәтенә ишара. Был ҡошсоҡтар бер-береһенән төрлө шарттарҙа — ике полюста йәшәүҙәре менән айырыла. Ләкин уларҙы ана шул "бер ботаҡҡа ҡуныуҙары" берләштерә. Ҡошсоҡтарҙың "йөрәге мәрхәмәтле, күңеле саф, изгелекле". Кешеләр араһында яҡшы мөнәсәбәттәрҙең һүрелә барыуымы, әллә бөгөнгө заманда йәмғиәттә тәбиғилекте яһалмалылыҡтың алмаштырыуымы уйҙарға һалған яҙыусыны? Көньяҡтан биҙеп, күңел йылыһына һыуһап, аҙашып йөрөгән ҡошсоҡтар осрай. Ҡалай ғына булһа ла, әҙип тормошҡа өмөт менән ҡарай: төньяҡта йәшәп тә күңел йылыһын һаҡлаған ҡошсоҡтар бар бит әле!

Һәр кем донъяға бәхет өсөн тыуа, ләкин уны төрлө кеше үҙенсә аңлай. Берәүҙәр уны байлыҡта тип уйлай, икенселәр халҡыңа арымай-талмай хеҙмәт итеүҙә күрә. Бәхет һәм бәхетле булыу тураһында Урал Ҡолошов әҫәрҙәрендә үҙенсә фекер йөрөтә. "Бәхет тураһында хикмәт" әҫәре йәшәүҙең мәғәнәһен асыҡлауға ҡоролған. Яҙыусы бында ла сағыштырыу, йәнәшә ҡуйыу алымын ҡуллана. Өс ат образы аша бәхет төшөнсәһен аңлата. Бәхет өсөн аттарҙың ҡайһыһы уға барып етә алды икән, тигән һорау ҡуя. Әлбиттә, "һәр ат үҙ юлы менән киткән. Тирәяҡта шул уҡ урман, ялан, йылға, тик аттар ғына үҙҙәренең холҡо һәм күңеле менән төрлө булып сыҡҡан". Бәхет тигәндә, тәүгеһе сабып киткән, икенсеһе йүгергән, ә өсөнсөһө ҡайһылай барһа, шулай атлай биргән. Ана шул өсөнсөһө генә ауыр юлдан һуң йоҡоһонан уянғанда яңы көнгә бағып: "Ниндәй бәхет!", — тип өндәшкән икән. Һағайып-һаҡланып ҡына юлға сыҡҡан икенсеһен бүреләр ашаған. Ә бына тәүгеһенә бер ҡайҙа ла туҡтарға тура килмәгән, ул һаман ер шары буйлап үҙ хыялына етеү өсөн саба икән.

Беренсе булыу әле бәхет түгел, тормошто иҫәп-хисапҡа ҡороу ҙа бәхет килтермәй. Бөтә хикмәт шунда: һин тормошта кешеләргә нимә илтәһең?! Ерҙә йәшәү, кешеләрҙең шатлыҡ-ҡайғыларын уртаҡлашыу һәм тәбиғи матурлыҡты күрә белеү үҙе бәхет тигән идея уҙғарыла. Урал Ҡолошов әҫәрҙәрендә тормош тураһында тәрән фәлсәфәүи фекер йөрөтә. Кеше яҙмышы, уның тормоштағы урыны, рухи ҡиммәттәр хаҡында уйлана. Йәнле тәбиғәт образдары аша фәлсәфәүи ҡараштарын сағылдыра. Аллегория алымына ҡоролған әҫәрҙәрендә йәмғиәттең мөһим һорауҙарын асыҡлай.

Ошондай әҫәрҙәре араһында ”Ҡалды күле” легендаһы айырылып тора. Тәүге әҫәрҙәрендә ситләтеп, хикмәтләп һүҙ йөрөтөү булһа, был әҫәре көнкүреш әкиәттәренә тартым. Жанры буйынса — легенда. ”Борон-борон заманда... йәшәгән, ти әбей менән бабай”, тип башланып китә. Бабай ”изге күңелле”, ”хайуандар телен аңлаған”, ”ҡоштар ҙа уның өсөн баш осонда һайраған”, ”сихри кеше” булған. Әммә уның ерҙә йәшәүенең һанаулы ғына көндәре ҡалған, Алла янына ”юл алырға” ваҡыты еткән. Шул саҡ ул улдарын янына йыйып, һуңғы һүҙҙәрен әйткән: ”Васыят итеп һеҙгә ошо матурлыҡты ҡалдырам. Иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле ҡомартҡы ул — тәбиғәт, ошо мәңгелек серле донъя менән гармонияла ғына һеҙ ысын бәхет табырһығыҙ. Ә ҡалғанын аҡыл, йөрәк һәм нәфсегеҙ ҡушҡанса эшләгеҙ. Ошо мәңгелек матурлыҡты һаҡлағыҙ, быуындан-быуынға ҡалдырығыҙ”.

Ҡарттың улдары әкиәттәрҙәгесә өс төрлө характерлы булып сыҡҡан. Уларҙың өсөһө лә өс төрлө тормош юлын һайлаған. Ҡомһоҙ оло улдан бөгөнгө көндә байлыҡ тип, изгелекте, матурлыҡты күрә белмәүселәр тарала. Нәфсеһен тыя алмай, тәбиғәтте бысратыусы, бейек-бейек йорттар һалдырыусы кешеләр уртансы улан тоҡомо. Изге йөрәкле, саф уйлы кесе ул ғына ағалары ҡалдырған, улар тыуҙырған ерҙәге афәтте тәбиғәт менән гармония табып туҡтата алған.

Был әҫәрендә лә яҙыусы йәшәйеш хаҡында уйлана. Ләкин бында ул тәбиғи байлыҡ һәм уны файҙаланыу тураһында һүҙ алып бара. Боронғо эпостарыбыҙҙан килгән тәбиғәт менән кеше араһындағы гармония хаҡында уйланыуҙарҙы заманса үҫтерә. Төрлө тарафтарҙа тәбиғәт тыуҙырған афәттәрҙе үҙенсә иҫкәртә. Ерҙә тормош өсөн көрәш дауам итә. Әммә матур тормош төҙөү тәбиғәт менән килешеп, аңлашып йәшәгәндә генә мөмкин. Шуға ла әҫәр: ”Кесе ул ошо легенданы үҙенең улдарына, улар ейәндәренә һөйләп ҡалдырып, беҙҙең көнгә килеп еткән... бөгөн беҙҙең арала тәбиғәтте аңлап, уның менән гармонияла йәшәгән талантлы, изге кешеләр ошо улдың нәҫелелер?” — тип тамамлана.

Әҫәрҙәрҙең үҙенсәлекле фәлсәфәгә ҡоролоуын да һыҙыҡ өҫтөнә алмай булмай. Ғәҙәттә, яҙыусы хәл-ваҡиғаларҙы Алла исеме менән бәйләп һөйләй. Ошондай башланғыс бер үк ваҡытта дини мотивтар ҙа алып инә. ”Был хәлде Алла үҙе генә белә торғандыр...”, ”Тик Алла ғына белә” кеүек һығымталар уларға үҙенсәлек өҫтәй. Хикмәттәрҙә генә түгел, ”Ҡалды күле” легендаһында ла шул үҙенсәлек ҡабатлана. Әҫәр ”Уны Алла үҙе генә белә...” тигән һүҙҙәр менән тамамлана. Бындай алым әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, тотош әҫәргә һығымта кеүек ҡабул ителә.

Ирекһеҙҙән боронғо грек фәйләсуфы Сократтың ”Мин шуны беләм: бер нәмә лә белмәйем” тигән һүҙҙәрен хәтерләйһең. Шул уҡ фекерҙе Шәреҡтең билдәле шағиры Омар Хәйям үҙенсә былай тип әйтеп биргән:

Күпме уйландым был донъя хаҡында,
Аңламаҫ бер ни ҙә юҡ кеүек бында.
Тик белдем бер ни ҙә белмәүем хаҡында,
Был һуңғы асышым булды шул асылда.

Урал Ҡолошов әҫәрҙәрендә лә ана шул ”бер ни ҙә белмәүе” үҙенсә әйтеп бирелгән. Тик ул ошондай фәлсәфәне Алла исеме менән бәйләй. Әйтергә кәрәк, яҙыусы боронғо өйрәтмәләргә һуҡырҙарса эйәрмәгән, ә үҙенсә әйтеп биреүгә өлгәшкән. Унын әҫәрҙәренең яңылығы тап шунда ята. Әҫәрҙәрендә дини мотивтар барлығын шәйләп, быға ниндәй аңлатма бирерһегеҙ, тигәс, ул былай тине: ”Был, моғайын, Аллаға эскерһеҙ ышаныуҙандыр. Алла, дин — ул бит аҡыл менән йөрәктең бәйләнеше, уларҙың үҙ-ара гармонияһы. Алла ул күктә түгел, ә беҙҙең үҙебеҙҙә. Шуға ла мин Алла төшөнсәһенә кешенең аҡылы, аңы мәғәнәһен һалдым. Ижадымда ундай элементтар бар икән, һиҙгер уҡыусы аңлаясаҡ. Мин ошо принцип аша бер үк ваҡытта кеше аҡылына ла, йөрәгенә лә мөрәжәғәт итәм”.

Ғөмүмән, Урал Ҡолошов әҫәрҙәре яңы йөкмәткеле, заманса яңғырашлы һәм улар поэтикаһы буйынса йәнлелеккә ҡоролған. Алла исеме менән бәйләп һөйләү үҙенсәлеге хәл-ваҡиғаларҙы, геройҙарҙы уҡыусы хөкөмөнә тапшырыу булһа, башҡа осраҡтарҙа ул уҡыусыны туранан-тура әңгәмәгә саҡыра. Әҫәр аҙағында уҡыусыға: ”Һин нисек уйлайһың?”, ”Ә һеҙ, дуҫтар, нисек уйлайһығыҙ?” тип өндәшә. Бындай алым үҙенән-үҙе уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә.

Әкиәтләштерелгән әҫәрҙәр күңелдә йәнлелек тыуҙыра, уларҙың йөкмәткеһен үҙләштереү еңел. Тормош хикмәттәре ялҡытҡыс нотоҡ уҡыу рәүешендә түгел, ә асылда уҡыусыны уйландырыуға ҡоролғандар. Ул кеше психологияһын иҫәпкә ала һәм заман талаптарынан сығып эш итә. Хәҙерге әҙәбиәт тураһында тәнҡиттә: ”Информацион даирәнең киңәйеүе үҙ һүҙен кешеләргә еткерергә теләгән шағирҙан ҡыҫҡараҡ яҙыуҙы талап итә”, — тип яҙылды.

Урал Ҡолошов ижадына ҡыҫҡалыҡ хас. Шиғри парсаларында ла, уймаҡ хикәйәләрендә лә ул бәләкәй формаға бай йөкмәтке һыйҙырырға ынтыла. Автор фәлсәфәүи-аллегорик әҫәрҙәрендә ҙур әҙәби дөйөмләштереүҙәр яһай. Шуға күрә унын ижадын фәлсәфәүи йүнәлешле тип билдәләргә мөмкин.

Ижад исемдән башлана. Уймикән, Минтимә, Ҡылтаймыш, Аҙашма, Йүнлебай, Йүнһеҙбай, Тырыш — бына унын әҫәрҙәренең тулы булмаған исемлеге. Автор урыҫ телендә яҙһа ла, исемдәрҙе башҡорт һүҙҙәренән яһаған. Йәнә күҙгә ташланғаны шул: айырым әҫәрҙәре традицион инеш-эпиграф менән башлана һәм улар ҙа башҡорт телендә бирелә. Был осраҡта яҙыусы үҙе ижад иткән шиғри парсаларҙы әҫәрҙәренең идея-йөкмәткеһе менән бәйле аннотация рәүешендә алдан тәҡдим итә. ”Тырыш һәм Ҡылтаймыш” хикмәтендә унын ”Ғүмереңде тиңләһәң ҡурсаҡ уйынына, эләгерһең ут ҡуйынына” тигән парсаһы файҙаланылған. Ә бына ”Ҡалды күле” легендаһы Ҡоншаҡ районының иң матур күленә бағышлана.

Шулай итеп, Силәбеләге урыҫ телле башҡорт яҙыусылары араһында Урал Ҡолошовтың үҙ урыны бар. Ул ижади асыштарға урау юлдар аша килде, әммә ҡабатлауҙарға барманы. Традицион көнсығыш әҙәбиәте жанры хикмәткә яңы биҙәк өҫтәне — унын ижадының оригиналлеге шунда. Әле XIX быуатта Мифтахетдин Аҡмулланың: ”Һүҙ сығыр шағирҙарҙан хикмәт менән...” тип әйткәне нәҡ Урал Ҡолошов ижады хаҡында булыр.